Тема: « Бойҙай бөртөгө» әкиәте
Эпиграф «Икмәк алтындан ҡиммәт»
Маҡсат: әкиәттең йөкмәткеһе менән таныштырыу,уны үҙләштереү; телмәр һәләтле
лектәрен үҫтереү; икмәк ҡәҙерен белергә, икмәкте өҫтәлгә килтергән эшсенең
эше менән танышыу һәм уларға ихтирам тәрбиәләү.
Йыһазлау: интеректив таҡта, маскалар

Дәрес барышы

I.Ойоштороу

II. Артикуляцион күнегеүҙәр - (И.Т.)
- һуҙынҡылар таҫмаһын уҡыу
- тартынҡыларҙы өҙөп, шартлатып уҡыу
- тартынҡы менән һуҙынҡыны ҡушып уҡыу (алда,артта,уртала)

Йомаҡ сисеү - (И.Т.)

Әсәйем мейескә һалһа,
Табала ул ҡабара.
Бешкәс телеп кенә алһаң,
Тәмле еҫтәр тарала.
Нимә һуң ул? Кем белә?
Йә әйтегеҙ тиҙ генә.

- Бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?
(Икмәк һүрәте) - (И.Т.)

III. Фонетик күнегеү - (И.Т.)

Әсәй бешергән икмәк
Бөтөн икмәктән тәмле.
Икмәк өҫтәлдә булһа,
Өйөбөҙ шундай йәмле.

- Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү (маскалар манән уҡыу) - (И.Т.)

IV. Инеш әңгәмә
- Икмәк беҙҙең өҫтәлгә килеп ултырғансы ниндәй ҡатмарлы юлдар үтә икән?

(И.Т.) : ерҙе һөрәләр,тырматалар,орлоҡ сәсәләр,иген өлгөрә,комбайн менән йыялар,
машиналар менән элеваторҙа итәләр,бойҙай һаҡлағыс (зернохронилище),
икмәк бешерәләр,икмәктәрҙе магазинда һаталар.

- Эйе,уҡыусылар, икмәк – иң ҡәҙерле ризыҡ (аҙыҡ).Был ризыҡты булдырыу өсөн күпме кеше көс түгә:  (И.Т.)
- механизаторҙар көҙөн баҫыуға ашлама сығара
- ерҙе туңға һөрә
- ҡышын ҡар тота
- игенселәр сәсеүгә орлоҡ әҙерләй
- яҙ еткәс ерҙе тағы һөрәләр,тырматалар
- орлоҡ сәсәләр,утайҙар,ерҙе йомшарталар,зарарлы бөжәктәрҙе ағыулайҙар
- ашлыҡ өлгөрә
- комбайн уны ура
- йыйылған игенде элеваторға оҙаталар
- он эшләйҙәр
- ондан икмәк бешерәләр

- Кемдәрҙең әсәләре өйҙә үҙҙәре икмәк һала? (һөйләтеү)

- Ә хәҙер һеҙҙең һөйләгәндәрҙе нығытып үтәйек. Был слайдта төрлө һөнәр эйәләренең эшләгән эштәрен дөрөҫ итеп табып,уҡтар менән тоташтырырға кәрәк

(И.Т.)  эш

- Иген үҫһен өсөн кешенең генә тырышлығы етәме,әллә тәбиғәт тә беҙгә ярҙам итәме?

(И.Т.) эш

-  (И.Т.) – Ниндәй икмәк була?

- (И.Т.)  -  Икмәк

- (И.Т.)  -  «ҡар йомғағы» уйыны. Берәр һүҙ өҫтәп һөйләмде арттыра барыу.

-  Икмәк бешерер өсөн беҙгә нимә кәрәк? (он) -  (И.Т.)
-  Ә он нимәнән барлыҡҡа килә? (бойҙайҙан) -  (И.Т.)
-  Эйе,балалар,икмәк бына ошо бойҙай бөртөктәренән килеп сыға ла инде -  (И.Т.)
-  Тимәк беҙ дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?

V. Текст өҫтөндә эш

- һүҙлек эше - (И.Т.)
- уҡытыусының уҡыуы
- һорауҙарға яуап биреү:
  - нисә туған тураһында һүҙ бара?(3)
  - улар ниндәй ғаиләлә үҫкәндәр?(ярлы)
  - улар ҡайҙа сығып киткәндәр?(сәфәргә)
  - ни өсөн?(аҙыҡ эҙләп)
  - ҡайҙа килеп сыҡҡандар?(яланға)

- иң өлкәне нимә табып алған? (1 тоҡ алтын)  -  (И.Т.)
- уртансыһы?(ҡылыс)  -  (И.Т.)
- иң бәләкәйе?(1 бөртөк бойҙай)  -  (И.Т.)
- алтынды тапҡас иң өлкәне нимә тигән?
- уртансыһы ?
- кесеһе?
- текста ниндәй һандар осрай? (7- магик һан,7 ырыу,7 нота,ҡурай сәскәһе,йәйғор төҫө, аҙнаның 7 көнө, Башҡортостандың 7 мөғжизәһе)

- «Икмәк алтындан ҡиммәт» мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ?
  Икмәк – һары алтын тиҙәр.Алтын бөртөкләп йыйыла.

- сылбырлап уҡыу

VI. Йомғаҡлау
- Икмәк – ҙур байлыҡ. Ул кешеләргә үҫергә, тырышып уҡырға,эшләргә һәм йәшәргә көс бирә. Ололарҙың әйткәнен һәр ваҡыт иҫтә тоторға кәрәк
  - Икмәктән оло булма
  - Икмәк аша атлама
  - Икмәктең валсығын да ергә төшөрмә.

VII. Өйгә эш
- Икмәк тураһында мәҡәлдәр яҙып килергә
- Әкиәттең йөкмәткеһен һөйләргә өйрәнергә.